# ИШЕМБАЙҘАН СЫҠҠАН КҮРЕНЕКЛЕ ШӘХЕСТӘР

**Абызгилдин Юнир Миңлеғәли улы,** 1939 йылда Сәлих ауылында тыуған. Өфө нефть институтын тамамлаған, шунда уҡ эшкә ҡала, химик-технолог. РФ ТФА академигы, техник фәндәр докторы, профессор.

**Бабушкин Василий Владимирович**, 1926 йылда Петровский ауылында тыуған. БАССР-ҙың атҡаҙанған уҡытыусыһы, 1-се дәрәжә Ватан һуғышы ордены менән наградланған. Бөтә ғүмерен балалар тәрбиәләүгә бағышлаған педагог. Әле Ишембай ҡалаһы һәм районы халыҡ мағарифы музейы директоры.

**Бирҙин Ғәли Иркәбәй улы**, 1917 йылда Байғужа ауылында тыуған. Советтар Союзы Геройы. Күп тапҡырҙар РСФСР Юғары Советы депутаты була. 1973 йылда вафат.

**Блохин Алексей Александрович,** 1897 йылда Ярославль губернаһы Головино ауылында тыуған, 1942 йылда Ишембай ҡалаһында үлгән. Инженер-геолог, Ишембай нефть ятҡылығын асыусы.

**Байғолов Миңлеғулла Солтан улы**, 1928 йылда Ҡанаҡай ауылында тыуған. Социалистик Хеҙмәт Геройы. 1973 йылда Өфөлә вафат булған.

**Бәширова Фирҙәүес Тимербулат ҡыҙы**, Смаҡай ауылында тыуған. Шағирә. Татарстан Президентының милләт-ара бәйләнештәр буйынса баш референты, Ҡазан башҡорттары берләшмәһе рәйесе, Башҡортостан яҙыусылар союзы ағзаһы.

**Вилданов Әхәт Ханнан улы**, 1944 йылда Кәбәс ауылында тыуған. Филология фәндәре кандидаты. Аҡмулла исемендәге премия лауреаты. Башҡорт дәүләт педагогия университетында кафедра мөдире.

**Вәлиди Әхмәтзәки Әхмәтшаһ улы**, 1890 йылдың 10 декабрендә Көҙән ауылында тыуған, 1970 йылдың 26 июлендә Төркиәнең Истанбул ҡалаһында үлгән. Башҡорт милли хәрәкәте етәксеһе, шәрҡиәтсе һәм төркиәт белгесе. Философия фәндәре докторы. Манчестер университетының штаттағы профессоры, почетлы докторы.

**Вәлидов Ғәбделрәүеф Әхмәтшаһ улы** — Әхмәтзәки Вәлидовтың ҡустыһы. 1896 йылда Көҙән ауылында донъяға килгән. Репрессия ҡорбаны — 1938 йылда атылған.

**Вәлидов Ғәбделхай Әхмәтшаһ улы** — Әхмәтзәки Вәлидиҙең ҡустыһы. 1903 йылда Көҙән ауылында донъяға килгән. Учалы районының Мулдаҡай ауылында уҡытыусы булып эшләгән сағында ҡулға алынып, 1937 йылда атылған.

**Вәлидов Әхмәтшаһ Әхмәтйән улы** — Әхмәтзәки Вәлидовтың атаһы, Көҙән ауылында 1860 йылда донъяға килгән. Репрессия ҡорбаны, 1938 йылда атылған.

**Вәлидова Өммөхаят Мөхәмәтҡафый ҡыҙы (**1873-1946) — Әхмәтзәки Вәлидовтың әсәһе. Ул фарсыса, ғәрәпсә белемле кеше булған, ошо белемдәрен улына бирергә лә күп көс һалған. Руми, Навои, Йәсәүи, Суфый Аллаяр кеүек шағирҙарҙың әҫәрҙәрен яттан белгән. Көҙән ауылында мәҙрәсә асып, ҡыҙ балаларға белем биргән.

**Вәлиев Камил Абдрахман улы**, 1934 йылда тыуған. Маҡар ауылында үҫә, уҡый. Физика-математика фәндәре докторы, профессор. БР-ҙың атҡаҙанған фән эшмәкәре. 2000 йылда вафат була.

**Гәрәев Әмир Сәлимгәрәй улы**, 1928 йылда Түбәнге Әрмет ауылында тыуған, яҙыусы, 1953-1970 йылдарҙа Совет Башҡортостаны газетаһында, китап нәшриәтендә баш редактор, «Ағиҙел» журналының яуаплы сәркәтибе вазифаларын башҡара. «Почет Билдәһе» ордены менән бүләкләнгән.

**Дауытов Виләр Йомағол улы**, 1933 йылда Юлдаш ауылында тыуған. Республика газета һәм журналдарында эшләй. БАССР-ҙың мәҙәниәт министры, БАССР-ҙың телерадиотапшырыуҙар комитеты рәйесе, өлкә комитетында бүлек мөдире урынбаҫары, Башҡортостан Республикаһының Дәүләт Йыйылышында бүлек мөдире вазифаларын башҡара.

**Дауытов Салауат Әхәт улы**, 1947 йылда Ишембай ҡалаһында донъяға килә. Башҡортостан Дәүләт Йыйылышының Закондар сығарыу Палатаһы депутаты, ундағы сәнәғәт комитеты рәйесе урынбаҫары.

**Ғиззәтуллин Ибраһим Ғәзиз улы**, 1918 йылда Түбәнге Әрмет ауылда тыуған, яҙыусы. БАССР-ҙың атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре. 3-сө дәрәжә Дан, 1-се дәрәжә Ватан һуғышы, Халыҡтар дуҫлығы ордендары менән наградланған. 1992 йылда үлгән.

**Ғөбәйҙуллин Камил Ғөбәй улы**, 1949 йылда Ишембай ҡалаһында донъяға килә. Башҡортостан Республикаһының атҡаҙанған рәссамы. «Юрматы ере» исемле полиптик өсөн ул Салауат Юлаев исемендәге республика дәүләт премияһына лайыҡ була.

**Ғәбиҙуллин Зәйнулла Ғәйнулла улы**, 1941 йылда Түбәнге Әрмет ауылында тыуған. Медицина фәндәре докторы, профессор. Башҡорт дәүләт медицина университетында кафедра мөдире.

**Ғәйнетдинов Мәүлетбай Сөләймән улы**, 1938 йылда Этҡол ауылында тыуған. Башҡорт эстрада йырсыһы. БАССР-ҙың халыҡ һәм атҡаҙанған артисы.

**Ғәлимов Баязит Сабирйән улы**, 1942 йылда Кинйәбулат ауылында тыуған. Философ, Халыҡ-ара психология фәндәре академияһының тулы хоҡуҡлы ағзаһы, философия фәндәре докторы, профессор, Халыҡтар дуҫлығы ордены менән наградланған. БДУ-ның проректоры.

**Килмөхәмәтов Венер Хызыр улы**, 1945 йылда Кинйәбулат ауылында тыуған. Йырсы. 1982 йылда вафат була.

**Ҡараһаҡал (Миндеғол Юлаев)** — 1739-40 йылдарҙағы башҡорт ихтилалының етәксеһе. Сығышы тураһында бер нисә фекер йөрөй. Уның Һәләүек йылғаһы буйындағы Аҙнай ауылында тыуыуы дөрөҫлөккә яҡын.

**Ҡарамышев Ғүмәр** (?-1915 й). Ырымбурҙағы кадеттар корпусын тамамлай, офицер була. Стәрлетамаҡта һәм Ырымбурҙа полиция идаралағында төрлө вазифалар башҡара. Һуңынан сауҙа менән шөғөлләнә. Троицк ҡалаһында «Рәсүлиә» мәҙрәсәһен тотоуға аҡса бүлә. Түбәнге Әрмет ауылында ике ҡатлы мәҙрәсә һалдыра. Көҙән ауылындағы мәҙрәсәне тотоуға ярҙам итә, үҙ иҫәбенә Ырымбур, Ҡазан, Троицк ҡалаларына йәштәрҙе уҡырға ебәрә.

**Ҡарамышев Ғәлимйән Харис улы**, 1903 йылда Маҡар ауылында тыуған, 1977 йылда Өфөлә үлгән. Башҡорт актеры. РСФСР-ҙың һәм БАССР-ҙың халыҡ, шулай уҡ атҡаҙанған артисы. Хеҙмәт Ҡыҙыл Байраҡ, «Почет Билдәһе» ордендары менән наградланған.

**Ҡарамышев Ибраһим Байслан улы** (XVIII быуат аҙағында һәм XIX быуат башында йәшәй). Башҡорт ғәскәрҙәрендә офицер була. 1812 йылдағы Ватан һуғышында ҡатнаша. Кантон начальнигы булып эшләй. Ырымбур ҡалаһында Караванһарай төҙөлөшөнә аҡсалата ярҙам итә, транспорт бүлә, эштәрҙе ойоштороуҙа ҡатнаша. Тирмән таштарын эшкәртеүҙе яйға һала. Вафаты 1868 йыл.

**Ҡарамышев Йософ** — Ырымбурҙағы кадеттар корпусын тамамлағандан һуң, кантон начальнигы була, хәрби төҙөлөш эштәре менән шөғөлләнә. XIX быуаттағы Урта Азия походтарында башҡорт ғәскәрҙәренә командалыҡ итә. Халыҡ уны Йософ майор тип йөрөтә, ә ҡайһы бер тарихсылар уның һуңғы хәрби дәрәжәһе генерал-майор булған тип раҫлай. 1872 йылда Маҡар ауылында рус-башҡорт училищеһы аса.

**Ҡарамышев Һиҙиәтулла Ибраһим улы** (1848-?). Бохарала белем ала, суфыйсылыҡ ҡанундарын өйрәнә. Әбу Ғәли Синаның һәм мосолман донъяһының башҡа ғалимдарының хеҙмәттәре буйынса медицина серҙәренә төшөнә. Бохарала табип практикаһын үтә. 12 йылдан һуң ул имам-хатиб таныҡлығы менән суфый булып, Маҡар ауылына ҡайта. Кешеләрҙе дарыу үләндәре һәм инандырыу ярҙамында уңышлы дауалай.

**Ҡарамышев Мөхәмәтгәрәй Батыргәрәй улы,** 1888 йылда тыуған. Ҡазанда уҡытыусылар семинарияһын тамамлай. Ырымбур өлкәһендә уҡытыусы булып эшләй. 1914 йылда үҙ ауылында балалар уҡыта. Үҙ аҡсаһына китапхана аса, ауыл халҡы араһында мәҙәни-ағартыу эштәре алып бара. 1917 йылғы февраль революцияһынан һуң Стәрлетамаҡ ҡалаһында өйәҙ Ер комитетының рәйесе урынбаҫары булып эшләй, администратор вазифаһын башҡара. 1917 йылда Халыҡ Комиссарҙары Советы рәйесе итеп тәғәйенләнә. 1922 йылда вафат була.

**Ҡарамышев Әмир Батыргәрәй улы**, 1892 йылда тыуған. Революциянан һуң Стәрлетамаҡ өйәҙ полицияһы начальнигы булып эшләй. Башҡорт халҡының автономия алыу өсөн барған милли хәрәкәтенә ҡушылып, уның ойоштороусыларының береһенә әйләнә. Граждандар һуғышында командир була, 1918 йылда һуғыш яланында һәләк була.

**Килмәк Нурышев**, 1735-1736 йылдарҙағы башҡорт ихтилалы етәкселәренең береһе. 1734 йылғы Бөтә башҡорт ҡоролтайын саҡырыуҙы ойоштороуҙа актив ҡатнаша. 1737 йылдың февралендә ҡулға алына. Артабанғы яҙмышы билдәһеҙ.

**Ҡолмөхәмәтов Яҡуп Хәйрулла улы (Яҡуп Ҡолмой),** 1918 йылда Ҡанаҡай ауылында тыуған, 1994 йылда үлгән. Башҡорт шағиры. БАССР-ҙың атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре һәм атҡаҙанған сәнғәт эшмәкәре. 2-се дәрәжә Ватан һуғышы ордены менән наградланған.

**Ҡорбанғәлиева Суфия Шәрифулла ҡыҙы**, 1949 йылда Байғужа ауылында тыуған. Башҡортостандың халыҡ һәм атҡаҙанған артисткаһы.

**Ҡотлогилдин Наил Закир улы**, 1946 йылда Юрматы ауылында тыуған. Рәсәйҙең почетлы нефтехимигы, Башҡортостандың атҡаҙанған нефтсеһе, Башҡортостан Республикаһы Дәүләт Йыйылышының Вәкилдәр Палатаһы депутаты.

**Ҡотошов Әхмәт Шаһиәхмәт улы,** 1911 йылда Ҡарайған ауылында тыуған. Мәскәүҙә Бөтә Союз журналистика институтын (1930-1933 йылдар) тамамлағас, Урал өлкәһендә башҡорт телендә сыҡҡан «Урал большевигы» газетаһының баш редакторы урынбаҫары, 1936 йылда — «Башҡортостан» газетаһында, 1939 йылда — ВКП(б)-ның Башҡортостан өлкә комитетының матбуғат секторы, 1940-65 йылдарҙа Башҡортостан китап нәшриәтендә редактор, баш редактор булып эшләй.

**Ҡотошов Рамаҙан Нурғәли улы**, 1924 йылда Ҡарағай ауылында тыуған. Серго Орджоникидзе исемендәге Өфө авиация-техник университеты доценты, филология фәндәре кандидаты, яҙыусы һәм ғилми хеҙмәткәр.

**Зарипов Нур (Нурмөхәмәт) Талип улы**, 1925 йылда Көҙән ауылында тыуған. Башҡорт әҙәбиәте белгесе һәм фольклорсы. Филология фәндәре кандидаты. БАССР-ҙың атҡаҙанған фән эшмәкәре. 2-се дәрәжә Ватан һуғышы ордены менән наградланған, Салауат Юлаев исемендәге Дәүләт премияһы лауреаты. 1997 йылда Өфө ҡалаһында үлгән.

**Зөбәйҙуллин Хисбулла Ғүмәр улы**, 1929 йылда Түбәнге Әрмет ауылында тыуған. Башҡорт бейеүсеһе. БАССР-ҙың халыҡ артисы.

**Ибраһимов Ишҡәле,** Яр-Бишҡаҙаҡ ауылынан. Хеҙмәт Ҡыҙыл Байраҡ ордены кавалеры.

**Ильясова Гөлдәр Мозафар ҡыҙы**, 1954 йылда Ишембай ҡалаһында тыуған. Режиссер, Башҡортостандың атҡаҙанған сәнғәт эшмәкәре, Салауат Юлаев исемендәге Дәүләт премияһы лауреаты.

**Иманғолов Динислам Исламетдин улы**, 1924 йылда Урман Бишҡаҙаҡ ауылында тыуған. Бөйөк Ватан һуғышында ҡатнашҡан. Һуғыштан һуң Стәрлетамаҡ сода комбинатында эшләп Социалистик Хеҙмәт Геройы тигән исемгә лайыҡ булған.

**Иманғолов Сулпан Ғосам улы**, 1932 йылда Урман Бишҡаҙаҡ ауылында тыуған. Шағир, журналист.

**Искәндәрова-Юлдашева Тамара Ишбулды ҡыҙы**, 1958 йылда Ҡыяуыҡ ауылында тыуған. Шағирә. «Башҡортостан» гәзитенең бүлек мөдире.

**Йомағужин Әхтәм Нәҙерғәли улы**, 1906 йылда Маҡар ауылында тыуған, 1965 йылда Өфөлә вафат булған. 1930 йылдарҙа Башҡортостан телеграф агентствоһының (ТАСС) директоры. 1944—1960 йылдарҙа Башҡортостан китап нәшриәте редакторы.

**Мифтахов Риф Фәйзрахман улы**, 1939 йылда Кинйәбулат ауылында тыуған. Шағир, журналист, Башҡортостандың атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре. «Һәнәк» журналы редакцияһының әҙәбиәт бүлеге мөдире.

**Мөхәмәтҡолов Әҡсән Баймырҙа улы**, 1895 йылда Маҡар ауылында тыуған. Дәүләт эшмәкәре. Беренсе донъя һуғышында ҡатнаша. БАССР-ҙың халыҡ комиссариаты советы рәйесе, СССР Үҙәк башҡарма комитеты ағзаһы була. 1938 йылғы репрессия ҡорбаны. 1957 йылда аҡлана.

**Мортазин Зөфәр Йәдкәр улы**, 1951 йылда Һайран ауылында тыуған. Медицина фәндәре кандидаты. Башҡортостан Республикаһының Именлек Советы ағзаһы. Төрлө йылдарҙа Һаулыҡ һаҡлау министрлығында врач-инспектор, министр урынбаҫары, министр вазифаларын башҡара, әле Республика клиник дауаханаһында баш врач.

**Мусин Ноғман Сөләймән улы**, 1931 йылда Ҡолғона ауылында тыуған. Башҡорт яҙыусыһы. БАССР-ҙың атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре, Салауат Юлаев исемендәге Дәүләт премияһы лауреаты.

**Мусина Римма Мөхтәр ҡыҙы**, Әхмәр ауылында тыуған. Йырсы, Өфө дәүләт сәнғәт институты профессоры.

**Мырҙаҡаев Фәрүәз Ғиниәт улы**, 1935 йылда Үрге Әрмет ауылында тыуған, 1995 йылда үлгән. Медицина фәндәре докторы, профессор. БАССР-ҙың атҡаҙанған фән эшмәкәре.

**Нагаева Шәмсиә Миҙхәт ҡыҙы**, 1940 йылда Ишембай ҡалаһында тыуған. Башҡортостандың атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре. Салауат музыка училищеһында уҡыта.

**Нағуманов Зәйләғи Сирай улы**, 1922 йылда Түбәнге Әрмет ауылында тыуған. 1944 йылда геройҙарса һәләк булғас, Советтар Союзы Геройы исеме бирелә.

**Ниғмәтуллин Әнүәр Хөрмәт улы**, 1946 йылда Ғүмәр ауылында тыуған. Башҡортостандың үҙешмәкәр сәнғәт конкурстары лауреаты, Башҡортостан Республикаһының атҡаҙанған уҡытыусыһы.

**Ниғмәтуллин Рауил Хөрмәт улы**, 1941 йылда Ғүмәр ауылында тыуған. Шағир, Башҡортостан Республикаһының атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре. Башҡорт дәүләт педагогия университеты доценты.

**Ниғмәтуллин Юрий Зиннур улы**, 1950 йылда Ғүмәр ауылында тыуған. БР Мәғариф министерствоһының физик тәрбиә һәм Олимпия резервы әҙерләү идаралығы рәйесе. Башҡортостан Республикаһының атҡаҙанған физкультура хеҙмәткәре.

**Әхмәҙиев Вафа Исхаҡ улы**, 1937 йылда Ғүмәр ауылында тыуған. Шағир, әҙәбиәт белгесе. Филология фәндәре кандидаты. 1983 йылда Өфөлә үлгән.

**Әхмәтшина Рауза Рәүеф ҡыҙы**, 1923 йылда Көҙән ауылында донъяға килә. Әхмәтзәки Вәлидовтың ҡустыһының ҡыҙы. Стәрлетамаҡ һәм Өфө педагогия училищеларын тамамлағандан һуң, 1948-78 йылдарҙа Этҡол урта мәктәбендә, 1984 йылдан башлап Ишембай мәктәптәрендә уҡытыусы булып эшләгән. Башҡортостандың атҡаҙанған уҡытыусыһы.

**Әшрәпов Әсҡәт Тажетдин улы**, 1931 йылда Ҡыяуыҡ ауылында тыуған, кинооператор, Ҡаҙаҡ ССР-ының атҡаҙанған сәнғәт эшмәкәре. Хеҙмәт Ҡыҙыл Байраҡ ордены һәм миҙалдар менән наградланған.

**Рәжәпов Рәмил Камалетдин улы**, 1951 йылда Петровский ауылында донъяға килә. 1996 йылдан Башҡортостан Дәүләт Контроль Комитеты рәйесе урынбаҫары.

**Рәхимғолова Фәүзиә Абдулла ҡыҙы**, 1921 йылда Йәнырыҫ ауылында тыуған, 1996 йылда Өфөлә үлгән. Башҡорт яҙыусыһы, БАССР-ҙың атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре.

**Рәшитова Таңһылыу (ысын исеме Сәғиҙә) Фәрәй ҡыҙы**, 1905 йылда Көҙән ауылында тыуған, 1988 йылда Өфөлә үлгән. Башҡорт актрисаһы, БАССР-ҙың халыҡ һәм атҡаҙанған артисткаһы. Хеҙмәт Ҡыҙыл Байраҡ ордены менән наградланған.

**Сабитов Мөхтәр Абдрахман улы**, 1946 йылда Уразбай ауылында тыуған. Башҡортостан Республикаһының атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре. Әлеге көндә Салауат ҡалаһындағы «Салауат» гәзитендә редактор.

**Сәғитов Тәлғәт Ниғмәтулла улы**, 1942 йылда Маҡар ауылында тыуған. Башҡортостандың һәм Рәсәйҙең атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре. Башҡортостан Республикаһының мәҙәниәт министры.

**Сәғитова Фәрзәнә Фәтҡулла ҡыҙы**, 1943 йылда Көҙән ауылында тыуған. Башҡортостандың атҡаҙанған сәнғәт эшмәкәре, Өфө дәүләт сәнғәт институты доценты.

**Сәсәнбаева Эльмира Йыһанбай ҡыҙы**, 1950 йылда Маҡар ауылында тыуған, шағирә.

**Солтанова Мәрйәм Ғәзизрахман ҡыҙы**, 1938 йылда Маҡар ауылында тыуған. Дирижер, йырсы, үҙешмәкәр композитор. Башҡортостандың һәм Рәсәйҙең атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре.

**Таһирова Әнисә Абдулла ҡыҙы**, 1941 йылда Маҡар ауылында тыуған, шағирә, тәржемәсе. Башҡортостандың атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре.

**Тимербулатов Вил Мамил улы**, 1952 йылда Ишәй ауылында тыуған, Рәсәй Фәндәр академияһы академигы, профессор, Рәсәйҙең һәм Башҡортостандың атҡаҙанған фән эшмәкәре, Башҡортостандың атҡаҙанған врачы. БДМУ-ның ректоры.

**Тимербулатов Зөфәр Мөхтәр улы**, 1951 йылда Ишембай ҡалаһында тыуған. Башҡортостандың атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре. Башҡортостан Республикаһының матбуғат һәм киң информация министры.

**Туҡтамышев Шәмсетдин**, 1870 йылда Юрматы ауылында донъяға килгән, 1948 йылда вафат булған. 1930 йылдарҙа «Башҡортостан» колхозының рәйесе, Ишембай — Өфө тимер юлын, Ишембай нефть ятҡылығын асыу эшендә актив ҡатнашҡан шәхес. Хеҙмәт Ҡыҙыл Байраҡ ордены менән бүләкләнгән.

**Халиков Тимербулат Ғәләүетдин улы**, 1918 йылда Кинйәбулат ауылында тыуған. Советтар Союзы Геройы, 1958 йылда үлгән.

**Хисамова Тәнзилә Динислам ҡыҙы**, 1945 йылда Хазина ауылында тыуған. Башҡортостандың халыҡ һәм атҡаҙанған артисткаһы.

**Хәйбуллин Миңлеғәлим Хисаметдин улы**, 1929 йылда Әхмәр ауылында тыуған. Ленин, ике Ҡыҙыл Байраҡ, «Почет Билдәһе», Халыҡтар дуҫлығы ордендары кавалеры. Ишембай районының һәм Әхмәр ауылының Почетлы гражданины.

**Хәйруллин Зиннәт Харрас улы**, 1951 йылда Аҙнай ауылында донъяға килә. Мәләүез ҡала һәм районы хакимиәте башлығы, БР Дәүләт Йыйылышының Вәкилдәр Палатаһы депутаты, Башҡортостандың атҡаҙанған ауыл хужалығы хеҙмәткәре, Башҡортостандың халыҡ мәғарифы отличнигы.

**Хәмиҙуллин Марат Өмөтбай улы**. Социалистик Хеҙмәт Геройы.

**Хәсәнов Миңлеәхмәт Гәрәй улы**, 1926 йылда Ҡанаҡай ауылында тыуған. Ике Ленин ордены һәм миҙалдар менән наградланған.

**Шәһиев Альберт Хызыр улы**, 1959 йылда Кинйәбулат ауылында тыуған. Йырсы, Башҡортостандың атҡаҙанған артисы.

**Шәһиев Марс Хызыр улы**, 1946 йылда Кинйәбулат ауылында тыуған. Башҡортостан Республикаһының атҡаҙанған ауыл хужалығы хеҙмәткәре. Хәҙерге көндә «Башкортостанхлебпродукт» Дәүләт акционерҙар йәмғиәтенең генераль директоры.

**Шәһиев Харис Хызыр улы**, 1943 йылда Кинйәбулат ауылында тыуған. 1992-2000 йылдарҙа Ишембай районы хакимиәте башлығы була. Хеҙмәт Ҡыҙыл Байраҡ ордены кавалеры.

**Шәһиев Хәйҙәр Хызыр улы**, 1953 йылда Кинйәбулат ауылында тыуған. Башҡортостандың атҡаҙанған ауыл хужалығы хеҙмәткәре, Халыҡтар дуҫлығы ордены кавалеры. Хәҙерге көндә Стәрлетамаҡ районы хакимиәте башлығы. Дәүләт Йыйылышының Вәкилдәр Палатаһы депутаты.

**Шәрәфетдинов Сәйфетдин** Кинйәбулат ауылынан. Ленин, Хеҙмәт Ҡыҙыл Байраҡ ордендары кавалеры.

**Юлдашбаев Билал Хәмит улы,** 1928 йылда Юрматы ауылында (хәҙер Ишембай ҡалаһына инә) тыуған, тарихсы, этнополитолог. Тарих фәндәре докторы, профессор. БАССР-ҙың атҡаҙанған фән эшмәкәре.

**Юлмөхәмәтов Ринад Салауат улы**, 1957 йылда Этҡол ауылында тыуған, математик. Физика-математика фәндәре докторы, профессор. БР ФА ағза-корреспонденты.

**Яҡупов Ғәббәс Исхаҡ улы**, 1932 йылда Этҡол ауылында тыуған. Башҡорт дәүләт университетының доценты, иҡтисад фәндәре кандидаты.

**Янбаева Гөлфиә Мөхәмәтгәрәй ҡыҙы**, 1954 йылда Ҡанаҡай ауылында тыуған, журналист. Башҡортостан Республикаһының атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре. «Башҡортостан» газетаһының бүлек мөдире.

### 1812 йылғы Ватан һуғышында ҡатнашып «Парижды алған өсөн» тигән көмөш миҙал алыуға лайыҡ булғандар исемлеге:

**Этҡол ауылынан**

Юлдашбаев Рәсүл, Мәсәғүтов Мәүлихәй, Баҡыев Ғәбделманас, Ғәйепҡолов Ғәли, Исхаҡов Арсланбай, Аҡкужин Татлыбай, Исмәғилов Ҡотлосура, Ишкилдин Ярмөхәмәт.

**Сәлих ауылынан**

Күсәрбаев Килмөхәмәт, Ҡунаҡбаев Әбделмәнәф, Килдияров Дәүләтсура, Дәүләтбаев Фәйзулла, Яҫығолов Ҡәҙерғол, Дауытов Ҡарағол.

**Ҡанаҡай ауылынан**

Сыуашбаев Кинйәбай, Абдуллин Дәүләтбай, Әлемғолов Идрис, Мөхәмәтов Әлемғужа, Дәүләтсурин Әбделкәрим, Ҡолғонин Рыҫҡол, Рахманғолов Бәрҙеғол.

**Ҡарайған ауылынан**

Исламғолов Динмөхәмәт, Москоуов Ҡотлобирҙе, Биккинин Ҡарабай, Дәүләтбаев Ғәли, Тапарчин (Балтабаев) Кинйәкәй.

**Әхмәр ауылынан**

Сирағолов Дәүләткилде, Уразаев Сәфәрғол, Бикбауов Йәмил, Сыуашбаев Әлибай, Ҡабырбәков Селәүсен, Солтанбәков Аллабирҙе, Сынтимеров Хәсән, Ғәйетҡолов Ҡорбанғәли, Үзбәков Байгилде, Аҡсурин Ибраһим, Юнысов Мөхәмәтрәхим.

**Әптек ауылынан**

Аллағолов Иҫәнғол, Кейекҡужин Яхья, Көсөкҡолов Ишҡол, Әлимбәков Мөхәмәт.

**Арлар ауылынан**

Аҡҡужин Әбүбәкер, Ҡолғонин Ярмөхәмәт, Батыршин Әбдрәхим.

**Маҡар ауылынан**

Иҙелбәков Бикмөхәмәт, Үтәгәнов Биксәнтәй, Иҙелбәков Уралбай, Аҙнағолов Килмөхәмәт, Байымов Яҡшыдәүләт, Ҡалмырҙин Тимербай, Йәнебәков Ҡолғона, Ҡотоев Аҡбүре, Әлмөхәмәтов Әбүбәкер, Килдебаев Әбделғәлим, Хәсәнов Амангилде, Мәхмүтов Хужәхмәт, Тунгатаров Ҡотлогилде, Ерлебаев Уразай, Аҙнағолов Ҡолмөхәмәт.

**Кәбәс ауылынан** Хәлитов Игебай. **Кинйәкәй ауылынан** Алдаҡаев Кинйәғол. **Ғүмәр ауылынан** Бикмөхәмәтов Яҡуп. **Иҫкесәк ауылынан** Йомағужин Дәүләтҡол. **Буранғол ауылынан** Назарғолов Аҡкөсөк. **Бурансы ауылынан** Туҡтамышев Айытбай. **Юлдаш ауылынан** Солтанморатов Нанагил. **Һарғай ауылынан** Азатов Бикмөхәмәт. **Смаҡай ауылынан** Шаһманов Ильяс.

*Күренекле шәхестәр исемлеген Рамаҙан Ҡотошов, Раuил Ниғмәтуллин, Мәликә Әминева төҙөнө.*



*Ишембай районынан күп дәүләт эшмәкәрҙәре, етәкселәр үҫеп сыҡты. Был фотола ана шуларҙың ҡайһы берҙәрен — Башҡорт хөкүмәте ағзаларын күрәһегеҙ. Һулдан беренсе (баҫып тора) — Ҡарамышев Бәхтегәрәй Батыргәрәй улы (Маҡарҙан), уның янында баҫып тора — Башнаркомпрод коллегияһы ағзаһы Мөхәмәтҡолов Әҡсән Байморат улы (Маҡарҙан), һулдан бишенсе булып баҫып тора — Башревком председателе Зәки Вәлиди (Көҙәндән), тәүге рәттә уңдан икенсе (ултыра) — хәрби мәктәп мөдире Ишмурзин Сөләймән Ғәләүетдин улы (Кинйәбулаттан).*

*Фото 1919 йылдың майында Саранск ҡалаһында төшөрөлгән. (Р.Мифтаховтың шәхси архивынан алынды.)*

*Ишембай ҡалаһы һәм районы буйынса материалдарҙы Мәликә Әминева әҙерләне.*

**Ishembai** is the capital of the Ishembai district of Bashkortostan. It was founded February, 10th, 1940. The population is over 71,800, which is nearly two-thirds of the entire population of the district.

***History.*** The small village of Ishembai on the bank of the river Aghithel in the southern part of Bashkortostan was little known up until the first half of the XX century. In 1929 an exploration expedition headed by an engineer A.A.Blokhin discovered deposits of oil there. Then the state authorities decided to build a railway connecting Ishembai with Ufa, and there was started a refinery. During the war petroleum producers extracted almost 4.5 mln tons of oil.

In 1940 Ishembai was given a status of town and became an oil-centre in the Volga-Ural region. It was called the «Second Baku» with the beginning of World War II when the Baku machine-building plant was shipped on barges down the Caspian Sea, Volga, Kama and Aghithel to Ishembai. So, the first machine-building plant manufactured derricks, mud pumps, valves. Then it began working for the front — produced details of the famous «katyushas». Now it designs, makes and repairs drilling oil-field equipment and tools, namely, pneumatic suspended, mechanical (hydraulic) and tubing wrenches; tube elevators; operating, washing swivels; hydralic anchors; modernized mechanical packers.

***Leading Industry.*** Today the town is a huge industrial complex with well-developed oil and gas, chemical and engineering industries. Other large sectors are textiles, clothing and food.

So, the oldest enterprises are Ishembai Machine-Building plant and «Ishembaineft», an oil and gas extracting plant. The work collective of «Ishembaineft» provides not only the high level of production but also makes social gains. A lot of specialists from this factory work in different industrial districts of the republic.

Another large enterprises are Ishembai boring management, machine-tool factory, oil equipment factory and catalyst factory.

Last decade became a period of creation for the town. There have appeared new industrial enterprises important not only for the republic, but also for the Russian Federation. For example, the closed joint-stock company «Inman» (1992) which produces cranes-manipulators used in many large oil-extracting, energetic and building complexes of the country; «Krovlestom» (1998) is famous for its new roofing materials, it is the second factory in the country with such a production.

The economic growth rates depend to a great extent on machine-building. The open joint-stock company «Ishembaitransmash» manufactures cross-country vehicles «Vityaz», analogues of the Canadian vehicle «Formost». In July, 2000, in Nizhny Tagil the company represented Bashkortostan at the second Ural exhibition of weapons and equipment.

The proud of the light industry of Bashkortostan is the closed joint-stock company «Ishembai knitted-goods factory» which ranks sixth among 123 factories of Russia in producing knitted garments. It uses the equipment of different firms of Germany, Czechoslovakia, Switzerland, Italy and Japan. One of its latest awards is a Diploma of laureate of the Russian Competition «A Thousand of Russian Best Enterprises of the XXI century».

Another sector is the closed joint-stock company «Ishembai factory of hosiery». These two factories deliver textiles to a number of neighbouring regions, too.

***Educational and Cultural Centres.*** Today there are 113 educational institutions in Ishembai, including the branch of Ufa State Aviation Technical University and Petroleum College which carry out multilevel specialists training. Three years ago there was opened a cadet college, which prepares cadets and students of military and law educational institutions.

Centers of historical culture are House-Museum of the leader of national movement Akhmetzaki Validi and Museum of National Education.

The famous student of local fore V.L.Ignatyev created two museums: Historical Museum of Local Fore and Museum of Military Valour.

Ishembai is famous for its talents. The creativity of artists R.Kadyrov and K.Gubaidullin was highly estimated by art critics. Their pictures were exhibited in many countries. They took the lead in opening the branch of M.V.Nesterov State Museum of Art. F.Bulyakov, a playwright, lived here. G.Ilyasova, the producer of Starletamak Bashkir Drama Theatre began her activity in this town. The writer G.Ibragimov wrote his well-known novel «Kinya», a classic of the Bashkir literature, here too.

There is a Bashkir Theatre, headed by a producer R.Nigmatullina. Another collective is a Folk Dance Company «Berghamyt» which became a winner of the world festival of national creativity in France.

The town of Ishembai is glorified in books of such writers as G.Amirov, V.Sharygin, V.Ignatyev, F.Khabirov, F.Bulyakov. «Wonderful Treasure» is the name of the book of the Deputy of the State Duma of Russia Y.V.Utkin and his co-authors V.N.Polyakov and K.I.Mangushev.